*Ишмөхәмәт ШАРАПОВ,*
*Рәсәй Федерацияһы Белем биреүҙең*
*милли мәсьәләләре институты*
*Башҡортостан филиалының*
*өлкән ғилми хеҙмәткәре,*
*Башҡортостандың атҡаҙанған*
*уҡытыусыһы*



# БӨГӨНГӨ ӘҘӘБИӘТ ДӘРЕСЕ

Әҙәбиәт дәресен әҙәп, әҙәплелек дәресе тиҙәр. Тимәк, уҡыусы әҙәбиәт дәресендә әҫәр йөкмәткеһен үҙләштереү, уға анализ яһау күнекмәһе менән бергә тәрбиә һабаҡтары алырға, кешелеклек, әҙәплелек һыҙаттарына өйрәнергә бурыслы.

Һәр әҙәбиәт дәресе тап ошондай маҡсаттарҙан сығып ҡоролорға һәм үткәрелергә тейеш. Бөгөнгө әҙәбиәт дәресе ошо бурыс һәм маҡсаттарҙы үтәйме, әҙәбиәт уҡытыу методикаһы шул талаптарға яуап бирәме икән? Шуларға яуап бирергә тырышып ҡарайыҡ.

Әҙәбиәт дәресенән бөтә синыфтарға ла программа төҙөлгән, дәреслектәр сығарылған, күпмелер миҡдарҙа методик әсбаптарҙы ла ҡулға алырға мөмкин. Был йәһәттән үпкәләргә урын юҡ. Теге йәки был дәреслек етешмәй, программа юҡ тигән хәбәрҙәр мәктәп етәкселәре, район мәғариф бүлектәренең дәреслектәр буйынса яуаплы кешеләре иғтибарһыҙлығы, вайымһыҙлығы арҡаһында ғына булырға мөмкин. Дөрөҫ, программаның һәм дәреслектәрҙең ҡайһы бер етешһеҙлектәре, кәмселектәре лә бар. Тик үҙ эшенә яуаплы ҡараған һәр уҡытыусы теләһә ниндәй программа һәм дәреслектәр менән дә бына тигән итеп эшләй ала. Ә дәрескә илке-һалҡы ҡараған уҡытыусы бына тигән программа, дәреслектәр, методик ҡулланмалар менән дә уҡыусыларына хөрт белем бирергә мөмкин. Етмәһә, үҙенең илтифатһыҙ ҡарашы менән уҡыусыларҙа башҡорт әҙәбиәтенә ҡарата кире мөнәсәбәт тыуҙырыуы ихтимал. Моғайын, иң ҡурҡыныслыһы ошолор.

Әҙәбиәт уҡытыуҙа төп роль уҡытыусыла. Ул балаларҙа үҙ фәненә ҡарата һөйөү тәрбиәләй алһа һәм тейешле йүнәлеш, ынтылыш үҫтерһә, киләсәктә уҡыусылары, ниндәй һөнәрҙе һайлауға ҡарамаҫтан, үҙ телен, әҙәбиәтен һәм бигерәк тә халҡын яратыусы булып үҫәсәк, Тыуған иленә тоғро хеҙмәт итәсәк.

Уҡытыусы үҙ фәнен, методиканы белеү менән бергә, ярым артист, рәссам һәм башҡа һөнәрҙәрҙе лә бер аҙ белеүе мотлаҡ. Хәтеремдә, Белорет педучилищеһында уҡығанда беҙгә сәхнә сәнғәтенән уҡытҡан уҡытыусы әҫәрҙе шул тиклем юғары кимәлдә яттан һөйләй, ә беҙ уның дәресен көтөп алабыҙ ҙа ауыҙ асып тыңлай торғайныҡ. М.Алигерҙың «Зоя» поэмаһын яттан һөйләүе әле лә хәтеремдә. Уҡытыусы биргән һәр шиғыр, нисектер, еңел ятлана ине. Беҙ тырышып-тырышып уҡытыусыбыҙса һөйләргә өйрәндек. Бөгөнгө көндә уҡыу йорттарында буласаҡ уҡытыусыларға сәхнә сәнғәте, тасуири уҡыу дәрестәрен тейешле кимәлдә белем биреүе бик мөһим.

Методик әсбаптар ҙа уҡытыусыға булышлыҡ итә. М.Ғ.Ғималованың «Башҡорт әҙәбиәтен уҡытыу методикаһы» беренсе ярҙамсы булып тора. Стәрлетамаҡ пединститутынан Б.Б.Ғафаров та бик талантлы методист. Ул юғары уҡытыу йорто программаһын да, методиканы ла, урта мәктәптә лә яҡшы белә. Шуғалыр ҙа уның китаптарын, төплө мәҡәләләрен әҙәбиәт уҡытыусылары көтөп ала, үҙ эштәрендә уңышлы файҙалана. Башҡорт әҙәбиәтен уҡытыу тураһында башҡа методистарҙың һәм уҡытыусыларҙың мәҡәләләре гәзит-журналдарҙа

йыш баҫыла. Тимәк, был йәһәттән дә уҡытыусыларға зарланырға урын юҡ.

Уҡытыусының белем кимәле юғары булырға тейеш, әлбиттә. Юғары уҡыу йорто биргән белемгә һәр кем көн һайын тиерлек яңынан-яңы факттар, мәғлүмәттәр өҫтәй барырға бурыслы. Бөгөн башҡорт әҙәбиәте тарихының алты томлығы, халыҡ ижады томлыҡтары, гәзит-журнал материалдары уҡытыусының белем багажын тулыландырырға ярҙам итә. «Ватандаш», «Ағиҙел», «Шоңҡар», «Аманат» кеүек журналдарҙы, «Башҡортостан», «Йәшлек», «Йәншишмә» һәм район гәзиттәрен алдырмаған уҡытыусыны күҙ алдына килтереүе лә ҡыйын. Ваҡытлы матбуғатта уҡытыусы өсөн әленән-әле өҫтәлмә мәғлүмәттәр баҫыла тора. Шуларҙы һәр саҡ уҡый барыу, кәрәкле материалдар өсөн картотека төҙөү, папкалар булдырыу уҡытыусы өсөн бик мөһим. Сөнки теләгән бер кәрәкле дәрестә уларҙы тиҙ генә табырға һәм файҙаланырға була.

Уҡытыусы өсөн шәхси китапхана ла бик кәрәк. Дәрестәргә әҙәби әҫәрҙәрҙе башҡа урындан, китапханаларҙан эҙләп йөрөгәнсе, шәхси китапхананаң күпкә отошло. Унан уҡыусыларың да, йәш коллегаларың да файҙалана.

Хәҙерге заманда уҡытыусылар өсөн, бигерәк тә әҙәбиәт уҡытыусылары өсөн, техник саралар яҡшы ярҙамсы. Радио һәм телевидение аша төрлө әҫәрҙәр, драмалар, осрашыуҙар, телепортреттар һәм башҡа тапшырыуҙар йыш күрһәтелә. Уҡытыусы шуларҙы үҙенә яҙҙырып алһа, аҙаҡтан дәрестәрендә ҡулланып ебәрһә, был дәрес бик һөҙөмтәле һәм уңышлы була. Мин үҙем уҡыусыларыма шундай тапшырыуҙар ваҡытын алдан әйтәм. Улар уны ҡарайҙар һәм әҙәбиәт дәфтәренә ҡыҫҡаса аннотация яҙып киләләр. Билдәле, уҡыусы хеҙмәте баһалана. Бындай алым уҡыусыларға белем дә бирә, яҙма эшкә лә өйрәтә. Бала теге йәки был әҫәргә үҙ баһаһын бирергә тырыша, бер юлы киләсәктәге имтихандарға ла әҙерләнә. Бындай эшкә бер өйрәнеп алһалар, иҫкәртмәһәң дә уны мауығып башҡаралар.

Күп уҡытыусылар уҡыусыларының әҙәби китаптар уҡымауына зарлана. Йәнәһе, радио һәм телевидение балаларҙы ялҡаулыҡҡа өйрәтә. Был фекерҙә, бәлки, күпмелер дөрөҫлөк тә барҙыр. Әммә уҡыусыларҙың синыфтан тыш уҡыуы менән тейешенсә етәкселек итһәң, кәрәкле талап ҡуйһаң, балалар әҙәби китаптарҙы мауығып уҡый. Бының өсөн һәр сирек һайын синыфтан тыш дәрестәр үткәреү, уҡыусыларҙың әҙәби китаптар уҡыуы менән таныша барыу уңыш килтерә. Әҙәби китаптар уҡыу менән бергә, ваҡытлы матбуғатҡа һөйөү тәрбиәләү ҙә үтә мөһим. Тел һәм әҙәбиәт дәрестәрендә гәзит-журнал материалдарын ҡулланыу — уҡыусыларҙа матбуғатҡа һәм әҙәбиәткә һөйөү тәрбиәләүҙең әһәмиәтле сараһы. Шулай уҡ йәш хәбәрселәр, ижадсылар түңәрәктәре ойоштороу ҙа белемде тәрәнәйтеүгә ярҙам итә. Синыфтан тыш уҡыуға һәр сирек һайын йомғаҡ яһай барыу һәм баһалау менән бергә, йылына бер тапҡыр, йәш үҙенсәлектәренә ҡарап, синыфтан тыш уҡыуҙың бер сәғәтен үткән йылғы әҙәби журналдарға бағышлау мөмкин. Бында уҡыусы йыллыҡ журнал һандарына анализ яһай. Бала тикшеренеүсе, дөйөмләштереүсе булып сығыш яһай.

Йыл һайын «Ағиҙел» журналында, ай һайын гәзиттәрҙә яҙыусылар юбилейы тураһында мәғлүмәттәр баҫыла. Ошолар тураһында дәрестә әйтеп китеү, төрлө кисәләр үткәреү, яҙыусыларҙы осрашыуҙарға саҡырыу уҡытыусының изге бурысы. Бала тик программала ҡаралғандар менән генә ҡайнамай, ә дөйөм башҡорт әҙәбиәте кимәлендә фекер йөрөтөргә өйрәнә. Былар ҙа белем һәм тәрбиә биреүҙә кәрәк.

Мәктәптәрҙә башҡорт теле һәм әҙәбиәте буйынса аҙналыҡ, ун көнлөк, айлыҡтар үткәреү йолаға әүерелгән. Билдәле, улар ҙур әҙерлек менән үткәрелһә, бик әһәмиәтле эш башҡарыла. Шулай уҡ тел һәм әҙәбиәттән олимпиадалар үткәреү ҙә киң йәйелдерелгән. Уҡыусыларҙың синыфтағы, мәктәптәге ярыштарҙа еңеп сыҡҡандары хатта район һәм республикалағы шундай сараларҙа бик әүҙем һәм ихлас ҡатнаша. Республика буйынса еңеп сыҡҡандар имтиханһыҙ ғына юғары уҡыу йорттарына ла инеп китә.

Алда телгә алған эштәр һәм сараларҙы тулыһынса еренә еткереп үтәһәң, уҡыусыларҙың белем кимәле лә юғары була, әҙәбиәтте лә яраталар, китап уҡырға ла ынтылып торалар. Әҙәбиәт дәресен тик дәреслектәр буйынса ғына ойоштороу методика һәм тормош талап иткән бөтә сараларҙың тик яртыһы миҡдарында ғына булыр. Шуларҙан сығып, уҡытыусылар алдында торған бурыстар кимәлен билдәләргә мөмкин. Уҡытыусы үҙ һөнәрен, эшен, башҡорт әҙәбиәтен ярата икән, ул һәр дәресен яҡшылап үткәрергә тырыша. Ә ысын әҙәбиәт дәресе, һис шикһеҙ, бөтә яҡтан да тик уңыш ҡына килтерә.